Хөрмәтле ауылдаштар!

Һеҙҙең иғтибарығыҙға Аҫҡар ауыл советы һәм ауыл хакимиәтенең 2017 йылдағы эшмәкәрлеге тураһында отчет-докладымды тәҡдим итәм.

Ауыл Советы һәм хакимиәте үҙенең эшен ауыл биләмәһе Уставына, федераль һәм республика закондарына ярашлы башҡарҙы.

Аҫҡар ауылы Советының уставына ярашлы 10 депутат эшләп килә.

Советтың төп эше – урындағы мәсьәләләрҙе хәл итеү, халыҡ менән эшләү.

Депутаттар үҙ мөмкинселлектәренән сығып үҙҙәренең һайлау округтарында һайлаусылар менән эш алып баралар. Депуттар һәр ваҡыт кәңәштәре менән ярҙам итеп торалар, тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ.

2017 йыда 8 Совет ултырышы үткәрелеп, бөтәһе 47 мәсьәлә ҡаралған.

Дөйөм алғанда ултырышта 131-се федераль законға ярашлы, Бюджет ҡабул итеү, Бюджетҡа үҙгәрештәр индереү һәм үтәлешен ҡарау, ҡабул ителгән положениеләргә үҙгәрештәр индереү һәм ҡабул итеү, янғын хәүефһеҙлеге һәм янғынға ҡаршы саралар күреү, ауылдарҙы төҙөкләндереү, урындағы мәсьәләләрҙе хәл итеү һәм башҡа мәсьәләр ҡаралды.

Ауыл советының ҡайһы бер вәкәләттәре муниципаль районға күсереү тураһында Килешеү нигеҙендә эшләнә. Килешеүгә ярашлы, муниципаль милек һәм ер участкалары менән идара итеү функциялар район буйынса милек менән идара итеү комитетына, юл буйынса һәм шулай уҡ ер контроле вәкәләттәре районға бирелде, әммә ләкин ауыл урамдары юлдарына ҡағылышлы эштәр килешеү нигеҙендә ауыл хакимиәте тарафынан башҡарыла.

2017 йылда шундай килешеү нигезендә Нөгөш урамын ремонтлатыуға өлгәштек. Был юлды яҙ айҙарында, гарантия нигеҙендә, тағы ла килеп ҡараясаҡтар.

Ауыл хакимиәтендә 91 бойороҡ, 83 ҡарар, 39 кадрҙар буйынса бойороҡ сығарылған. Ҡабул ителгән норматив акттар ауыл биләмәһенең рәсми сайтында урынлаштырылып барыла.

Район прокуратураһына яңы ҡабул ителәсәк норматив акттар юридик экспертизаға ебәрелеп тора.

Федераль закондарға үҙгәрештәр инеү сәбәпле, Район прокуратураһы тарафынан элекке ҡабул ителгән норматив акттарға 9 протест, 4 представление күрһәтелде, норматив акттарға үҙгәрештәр индерелеп ваҡытында яуаптар бирелде.

2017 йылда ауыл хакимиәтендә 8 яҙма, 66 телдән мөрәжәғәт теркәлгән.

2829 мөрәжәғәт буйынса төрлө справкалар бирелгән, 98 нотариаль хеҙмәт күрһәтелгән.

Мөрәжәғәттәр ер мәсьәләһе, нотариаль хеҙмәт күрһәтеү, пособие түләүҙәр, төрлө справкалар биреү һәм башкалар. Бөтә мөрәжәғәттәрҙә ваҡытында ҡаралып яуаптар бирелеп барҙы.

2017 йыл Башҡортостан Республикаһы башлығы тарафынан Экология һәм айырым һаҡланған территориялар йылы тип иғлан ителгәйне. Ошоға ярашлы төрлө мәҙәни саралар үткәрелде, төҙөкләндереү эштәре башҡарылды. Аҫҡар ауылнда сүп-сар түгеү

урыны күсерелеп яңынан кәртәләнде. Экологик өмәләр үткәрелде. Был эштәрҙә мәктәп, культура учреждениелары активлыҡ күрһәттеләр.

2017 йылда Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә урындағы башланғыстарға нигеҙләнгән муниципаль райондарының ауыл һәм ҡала биләмәләрен үҫтереү проекты нигеҙендә Исламбай ауылында яңы мҙәниәт йорто төҙөлдө. Был эште Бирдигулов Ғ.Ф. улы төҙөгән бригада егеттәре башкарҙы. Ошо егеттәргә, проект бойомға ашһын тип ярҙам иткән инициатив группаға, Исламбай ауылы халҡына рәхмәт әйтеп үткем килә.

Ауылдарҙа 3 йыйылыш, сход үткәрелде. Район хакимиәте башлығы һәм район белгестәренең халыҡ менән осрашыуы, янғын хәүефһеҙлеге, ауылдарҙы төҙөкләндереү, урамдарҙы яҡтыртыу, ауыл араһындағы юлдарҙың торошо, һыу менән тәьмин итеү кеүек мәсьәләләр ҡаралды.

2016 йылдың 1 ғинуарына ҡарата бөтәһе ауыл хакимиәтендә 1507 кеше иҫәпләнә. Эшкә яраклы 844 кеше булһа, шуларҙың 333 генә эшләй, эшһеҙ ҡатын-ҡыҙҙар һаны 145 булһа, ирҙәр-148. Күпселек халыҡ шәхси хужалыҡ килеме иҫәбенә йәшәй.

Ауыл биләмәһе буйынса:

Локаль һуғыш ветерандары – 12

Һуғыш ветерандарының тол ҡатындары- 1

Хеҙмәт ветерандар бәтәһе 63

Пенсионерҙар һаны бәтәһе 257

Инвалидтар бөтәһе 82: шулар иҫәбендә 15 инвалид балалар иҫәпләнә.

күп балалы ғаиләләр һаны – 66

Бөтәһе ауыл биләмәһе буйынса 423 хужалыҡ иҫәпләнә:

(Аҫҡарҙа – 170, Брәтәктә- 133, Исламбайҙа-120)

Демография торошона килгәндә бөтәһе 25 бала тыуған (былтыр – 29), 17 үлем теркәлгән (былтыр- 10).

Ауыл хужалағы буйынса шәхси хужалыҡтарҙа малдар һаны түбәндәгесә: һыйыр малы- 1152 баш (-32), ат малы-414 (-43), һарыҡ-кәзә малы- 1404 (-43), Ҡорттар- 231 (+20).

Ер биреү мәсьәләһе лә район вәкәләтенә инә, шулай булғас был һорау менән мөрәжәғәт итеүселәр тәүҙә ауыл хакимиәтенән кәрәкле справкалар алып, МФЦ- га мөрәжәғәт итәләр.

Күмәк балалы ғәиләләр өсөн ер участкалары мохтаж булғандарға ғына бирелә

Пай ерҙәрен документләштереү бик һүлпән бара, пайсыларға документ юллауҙа әүҙемерәк булыр кәрәк .

Торлаҡ төҙөлөш буйынса

Ауыл биләмәһендә бөтәһе 423 торлаҡ йорт иҫәпләнһә, шәхси йорттарҙың 70 проценты документлаштырылган. 1 мартка тиклем шәхси йорттар документлаштырылып бөтөргә тырышырға кәрәк, сөнки шунан һуң документ алыу процедураһы ҡатмарлашасаҡ.

Элемтә бәйләнеше буйынса өс ауылда ла Сотел операторы бәйләнеше элегә бар, әммә ҡасанға тиклем икәнлеге билдәһеҙ. Интернет селтәр бәйләнешенә бар.

Ауылдарҙы тәҙәкләндереү, урамдарҙы яҡтыртыу буйынса

Ауыл эсендәге урамдарҙың юлдарын Республика бюджетынан бүленгән аҡсаға мөмкин тиклем косметик булһа ла ремонт үткәрергә тырышабыҙ.

2015 йылда республика бюджетынан маҡсатлы бүленгән 400000 һум аҡсаға Исламбай ауылында Шәик урамы – 818 метр алыҫлыҡта- (153 166,28 һумға), Шәуәли урамы -682 метр алыҫлыҡта (97 248,37һумға) юлдар ремотланды.

Брәтәк ауылында 500 метрға Мәктәп- Ҡаран урамы аралығы ремотҡа ҡаралған, яҙ башынан ремонт эштәре башҡарыласаҡ. (49585,35р)

Яҡтыртыу мәсьәләһенә килгәндә, былтыр урам яҡтыртыуға түләргә аҡса етмәү сәбәпле, йәйге осорға ут һүндерелеп торолдо. Урамдарҙы көҙгөлөккә яҡтыртыу һуңға ҡалып китте, әлеге ваҡытта бөтәһе 60 светильник янып тора, көҙгө осорҙа 11 яңы плафон алып ҡуйылды, 25 плафон ремонтланылды, күбеһенең лампочкалары Днат ҡа әйләндерелде.

15 696 һумға 50 Днат лампочкалары, 24 330 һумға яңы плафондар алып ҡуйылды. Ремонтҡа материялдарға 23 648 һум аҡса тотонолдо (ИзУ, Дросель, Фото элемент, Прокалывающие зажимы, кабель). Урамдарҙы яҡтыртыуға урындағы бюджеттан 57 575 һум, республика бюджетынан 58 516 һум аҡса тотонолған.

Һыу менән тәьмин итеү буйынса

Үҙ сығымдарына һыу скважиналары ҡаҙытҡан шәхси хужалыҡтар һаныла арта бара, Аҫҡарҙа – 64, Брәтәктә - 44, Исламбайҙа – 29 һыу скважинаһы бар.

Исламбай ауылында һыу колонкалары килешеү нигеҙендә мәктәп, Брәтәк ауылында Ягафаров Г. ҡарамағында хеҙмәтләндерелә.

Газ балоны менән хеҙмәтләндереүгә килгәндә, халыҡ һорауы буйынса Белорет ҡалаһынан шәхси эшҡыуарға бәйләнешкә сығабыҙ.

Ауыл биләмәһендәге шәхси эшҡыуарҙарҙың эшмәкәрлегендә сауҙа һәм ағас эшкәртеү йүнәлеше өҫтөнлөк итә. Ауыл биләмәһендә сауҙа өлкәһендә 8 шәхси эшҡыуарҙың бөтәһе 11 магазины эшләй, шуларҙың Аҫҡарҙа- 5, Брәтәктә- 3, Исламбайҙа -3 магазин.

Шәхси эшҡыуарҙар төрлө байрам сараларын үткәреүҙә спонсорлыҡ ярҙам итеп торалар, халыҡҡа бөтә төр аҙыҡ-түлек, көнкүреш тауарҙары менән тьәмин итәләр.

Аҫҡар ауылында 13 кешегә, Исламбай ауылында 14 кешегә өй шарттарында социаль хеҙмәт күрһәтелә, социаль хеҙмәткәрҙәр үҙ эштәренә бик етди ҡарайҙар.

Ауыл биләмәһендә 3 бала опека, 10 бала ғәиләләрҙә тәрбиәлгә алынғандар.

3 ауыр һәм хәүефле ғәилә иҫәпләнә. Район хакимиәте ҡарамағындағы бәлиғ булмағандар эше һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау комиссияһы, опека һәм попечителлек секторы менән ауыр, эсеп ата-әсәләр тарафынан балаларын ҡарамаған ғәиләләргә рейдтар үткәрелде. Бер үк кешеләр менән йыш ҡына профилактик эштәр алып барырға тура килә.

Үҡенескә каршы Эскелеккә ҡаршы көрәш иң ауыр мәсьәлә булып тора. Һатыу итеү нөктәләре билгеле, тәртип һаҡлау органдары тарафынан ошо тәңгәлдә рейдтар үткәрелгән ине, был эш быйыл да дауам итер.

Газета-журналдар таратыу буйынса 2 почтальон хеҙмәтләндерә, ауыл хакимиәтенә мөрәжәғәттәр булманы.

Мәҙәниәт йорттары, мәктәп учреждениеләре үҙ пландарына ярашлы эшләп киләләлр

Өс ауылдала мәсеттәр эшләп килә. Дини байрамдарҙан Ураҙа, Ололар көнө мәссетәрҙә ойошторола.

Йәмәғәт ойошмалары менән тығыҙ бәйләнештә эш алып барыла, ветерандар, Ҡатын-Ҡыҙҙар советы актив эш алып бара, ауыр һәм хәүефле ғаиәләр менән профилактик эштәр, һөйләшеүҙәр үткәреүҙә ҙур ярҙам итә, төрлө саралар үткәреүҙә актив катнашалар.

Хәүефһеҙлек буйынса

Һәр ауылда ирекле янғын һүндереү дружиналары ойошторолган. Янғын һүндереү ЗИЛ-131 машинаһы әлеге вакытта төҙөк, урынлаштырыр өсөн йылы гараж юҠ, гараж төҙөтөү планда тора. Янғын һүндереү машинаһын тотоноуға финанс Ҡаралмаған. Төрлө финанс сығанаҠтары юлын эҙләргә тура килә. Өс ауылдала мотопомпалар яуаплы кешеләргә беркетелгән.

2016 йылда ауыл биләмәһендә бер янғын осрағы теркәлде (АҫҠар ауылында - шәхси йорт).

Үткән йылда ауыл биләмәһендә теркәлгән енәйәттәр, Административ хоҠуҠ боҙоусылар тураһында участка полицияһы айырым мәғлүмәт биреп үтәр.

Ауыл биләмәһендә запастағы хәрбиҙәр учеты алып барыла. Бөтәһе 320 запастағы хәрбиҙәр иҫәпләнә, шуларҙың 10 Ҡатын-Ҡыҙҙар, 27 призывниктар.

Бюджет үтәлеше буйынса;

Килем 2 307 269 һум, үтәлеш 101,5 процент

шуның эсендә үҙ килем – 399 540 һум, планға Ҡарата үтәлеш 109 процент

Сығым миллион 278 668 һум.

Быйылғы йылда бюджеткә ер налогынан 284 418 һум (2015 йылда-147 891 һум), мөлкәт налогынан 10 494 һум (2015 йылда 107 717 һум) килем инде.

Киләсәктә.

Алдағы пландарҙан

Быйылғы йылдағы Республика бюджетынан маҠсатлы бүленгән 500 мең һум аҠсаның: 400 мең һумын юлдарҙы ремонтлауға, 100 мең ауылдарҙы төҙөкләндереүгә планлаштырылған.

Ерҙе һәм шәхси милекте иҫәпкә алыу, эйәһеҙ мөлкәтте асыҠлау буйынса эштәрҙе дауам итеү тора.

ЙомғаҠлап шуны әйтеп үтәр инем. Ауыл советы менән берлектә киләсәктә эшләйһе эштәр күп. Ауыл биләмәһенең социаль-экономик үҫешен билдәләү, халыҠтың йәшәйешен яҠшыртыу, ауылдарҙы төҙөкләндереү буйынса ҙур эштәр тора. Ауылдың киләсәге урындағы халыҠтын тырышлығында тора, халыҠ ни тиклем берҙәм ауылда шул тиклем куркәм булыр. Шуның өсөндә ауыл советың урындағы халыҠ менән бергәләп эшләгәндә генә проблемаларҙы хәл итеп сыға алырбыҙ.

Ошоноң менән отчетым тамам.

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.

Хәкимиәт башлығы Ф.Ғ.Йәғәфәров